# Беҙҙең студент йылдары

№1 6 май, шишәмбе 2008 йыл

Туймазы педагогия колледжының Туған телдәр бүлеге гәзите

## Быйыл Туған тел һәм әҙәбиәт бүлегенә - 5 йыл!





12-се төркөм

32-се төркөм

Кураторҙары: Мусина Е.Н.

Кураторҙары: Габдрахманова Д.Ф.





22-се төркөм

Кураторҙары:Фәтихова З.С.

42-се төркөм

Кураторҙары:Кәримова Г.Я.



*Беренсе ҡарлуғастар*

52 –се төркөм

Кураторҙары:Климова В.И.

V курс студенттары – беҙҙең «беренсе ҡарлуғастар». Ҡыҙҙарға имтихандарын уңышлы тапшырыуҙарын теләйбеҙ.

# Беҙҙең быйылғы уңыштар

2008 йыл

**32-се төркөм:**

Шәмсетдинова Айгөл — республиканың химия һәм биология олимпиадаһында 6-сы урын алып, "Иң яҡшы мәсьәлә сисеүсе" номинацияһында еңеүсе булып ҡайтты. Тағы ла ошо уҡ йылды рус теле буйынса республика олимпиадаһында 2-се урын алды.

Хисамова Гүзәл – башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса республика олимпиадаһында ҡатнашып, "Тасуири уҡыусы" номинацияһында еңеүсе булды.

Ғәлләмова Рәзилә – инглиз теле буйынса республика олимпиадаһында ҡатнашты.

**42-се төркөм:**

Аскарова Элина, Азаматова Фәйрүзә — Өфө ҡалаһында уҙған "Азатлыҡ" татар ойошмаһы форумының ҡатнашыусылары.

## 12 апрель - экологик өмә

# Беҙ таҙалыҡ өсөн!

Яҙ көнө урамдарҙа генераль өмә ойоштороу традицияға әйләнде. Ҡар иреп бөтөү менән, бөтә бысраҡ тышҡа сыға. Кешеләрҙең ҡәйефен боҙоп пластик шешәләр, төрлө сүп-сар күренеп ята. Ҡалабыҙҙы был бысраҡтан тиҙерәк арындыраһы килә. Шуға күрә бөтә завод, фабрика эшселәре, мәктәп уҡыусылары, шәхси эшҡыуарҙар өмәгә йыйылышып сыҡтылар.

Иртә менән бөтә ерҙә эш ҡайнаны. Был көндө көрәк, тырма һәм һепертке бик кәрәкле эш ҡоралына әйләнде. Барыһы субботникта беҙҙең ҡалала ғына 7 мең эшсе һәм уҡыусы ҡатнашты.

Беҙҙең колледж студенттары ла, береһенән ҡалмай, иң беренсе булып эшкә сыҡтылар. Төркөмдәргә бүленгәндән һуң, һәр кем үҙенә беркетелгән территорияға йыйыштырырға китте. Колледж биләмәһе ялтырап ҡалды. Өмәнән һуң ҡалабыҙ матурланып яңырағандай тойолдо.

*Исмәғилева Л. (32-се төркөм)*

## Беҙ ҙә колледж эштәрендә ҡатнаштыҡ!

*Беҙҙең 32-се төркөм уҡыуҙа ғына түгел, хатта субботник эштәрендә лә иң алда бара. Ҡыҙҙар һәр ваҡыт дәртләнеп эшкә сығалар. Сөнки үҙ тыуған яҡтарын бөхтә, матур, сәскә атып ултырған сағын ғына күрәһеләре килә. Һуңғы тапҡыр сыҡҡанда, улар колледж территорияһындағы бордюрҙарҙы аҡланылар, сүптәрҙе йыйып түктеләр, ерҙе көҙҙән ҡалған япраҡтарҙан таҙарттылар. Хатта ауырып торған ҡыҙҙар ҙа ситтә ҡалманы Улар үҙҙәренең кабинетын йыйыштырҙылар, тәҙрәләрҙе йыуҙылар.*

*Ошо үткән субботникта бик күп эш эшләнде, тирә-яҡ матурайҙы. Һәр үткән кеше уларға һоҡланып ҡараны, матурлыҡҡа шатланды. Төркөм директор һәм завучтан бик күп мактаулы һүҙҙәр ишетте.*

*Ысынлап та, уларҙы мактамай буламы ни?!*

*Низамиева Р. (32-се төркөм)*

## *Апрель яңылыҡтары*

- Биккузина Мәрйәм, Китова Анна, Сатаева Белла Башҡортостан Республикаһы күләмендә педагогия колледждары араһында булып үткән педагогика менән психологиянан олимпиадала 3-сө урын яуланы. Был ваҡиға менән уларҙы ысын күңелдән ҡотлайбыҙ!
- "Аҡҡоштар" бейеү ансамбле Октябрьский ҡалаһында училище һәм колледждар араһында уҙған смотрҙа I урын яулап ҡайтты, ә II курс студенттары — махсус призға лайыҡ булды.
- Тарих уҡытыусыһы — Мөсифуллин Салауат Ришат улы республика колледждары араһында уҙған кабинеттар конкурсында ҡатнашты һәм һынатманы. Уның кабинеты Гран-приға лайыҡ булды.
- 11 апрель көндө беҙҙең "Салауат Юлаев" хоккей командаһы менән "Локоматив" командаһы араһында кубок өсөн ҡаты уйын үтте. "Салауат Юлаев" 4:1 менән еңеп сыкты һәм Рәсәй чемпионы исеменә лайыҡ булды. Был ваҡиға беҙҙең өсөн бик мөһим. Уларға яңынан-яңы уңыштар теләйбеҙ.
- Туймазы ҡалаһында "Ҡарауанһарай" төркөмөнөң концерты булды. Колледждың Туған телдәр студенттары бөтәһе бергә унда барҙылар һәм ҡәнәғәт ҡайттылар.



*"Ҡарауанһарай" төркөмө менән*

# Һүҙ – 32-се төркөмгә

## Бөтә нәмәлә лә тарих бар

Беҙ 2005-се йылдың йәмле август айында ауыр имтихандарҙы тапшырып, Туймазы педагогия колледжына уҡырға индек. Иң тәүҙә якты йөҙ менән төркөм етәксебеҙ Гүзәл Винер ҡыҙы ҡаршы алды. Беҙ Башҡортостандың төрлө төбәктәренән, Шаран, Бүздәк, Бакалы, Баймаҡ, Туймазы, Илеш яктарынан, йыйылдыҡ. Шулай итеп, төркөмөбөҙ тарихы башланып китте, барлығы 35 ҡыҙ белем илен яуларға сыктыҡ.

Беренсе курсты тамамлауға, төркөмдән 2 ҡыҙ китте һәм яңынын 3 ҡыҙ килде.

Беҙ - бик татыу төркөм. Ҡайғыларҙы ла, шатлыҡтарҙы ла бергә кисерәбеҙ. Бер-беребеҙгә һәр ваҡыт ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торабыҙ.

Төркөмөбөҙҙә ғорурланырлыҡ, ысын өлгө булырлыҡ ҡыҙҙарыбыҙ ҙа бик күп. Мәҫәлән, Шәмсетдинова Айгөл, Ғәлләмова Рәзилә, Хисамова Гүзәл - республика олимпиадаларында призлы урындар яулаусы студенттарыбыҙ. Төркөмөбөҙҙә йырсы, бейеүселәр ҙә бик күп. Шәмсетдинова Айгөл колледждың "Аҡҡоштар" бейеү ансамблендә бейей. Абдуллина Динара, Сафина Гөлнара, Ниғмәтуллина Гөлләриә үҙҙәренең моңло тауыштары менән һоҡландырып, бөтә концерттарҙа актив ҡатнашалар.

Башҡа төркөмдәр менән сағыштырғанда, беҙҙең төркөм иң көслөһө тип әйтһәк тә була. Сөнки төркөмөбөҙҙә яртыһынан күберәге 4-5 билдәләренә генә уҡыйҙар. Өс йыл эсендә 4 ҡыҙыбыҙ тормошҡа сыкты. Шулай уҡ беренсе төркөм етәксебеҙ Гүзәл Винер ҡыҙы ла кейәүгә сыкты. Артабан беҙҙе Дилә Фәүзил ҡыҙы етәкләп алып китте. Әлеге ваҡытта төркөмдә 31 ҡыҙ уҡый. Киләсәктә лә шулай уҡ берҙәм булып уҡып сығыуыбыҙға ышанабыҙ.

*Мәсәлимова С. (32-се төркөм)*

## Төркөмдөң йондоҙсоҡтары



Шәмсетдинова Айгөл Ришат ҡыҙы Туймазы районы Илсембәт ауылында тыуып үҫкән. 9-сы синыфтан һуң Туймазы педагогия колледжына татар теле һәм әҙәбиәте бүлегенә уҡырға инә. Бында төрлө олимпиадаларҙа ҡатнаша. Химия, биология, урыҫ телдәре буйынса республика кимәлендә уҙғарылған олимпиадаларға бара. Бейеү түнәрәгенә лә йөрөй. "Аҡҡоштар" бейеү ансамбле менән сығыштар яһай. Уҡыу буйынса ла "5" билдәләренә өлгәшә.

Туймазы педагогия колледжын тамамлағас, юғары уҡыу йортона инергә теләй.

*Хәбибуллина И. (32-се төркөм)*



3 апрель Өфөлә инглиз теле буйынса олимпиада үтте. Унда беҙҙең төркөмдәш Ғәлләмова Рәзилә лә ҡатнашты. Һәм мин унын тәьҫораттары менән бүлешергә булдым.

***Рәзилә, олимпиадаға әҙерләнгәндә ниндәй ҡыйынлыҡтар тыуҙы?***

- Олимпиадаға әҙерләнеү ваҡыты бик аҙ булды. Шулай уҡ баштараҡ инглиз телендә һөйләшеү дәрәжәм бик түбән ине. Мин күберәк уны яҡшыртыу өҫтөндә эшләнем.

***Олимпиада һорауҙары ауыр булдымы?***

-Һорауҙар, әлбиттә, ауыр ине. Барлыҡ һорауҙарға яуап бирер өсөн 4 сәғәт бирелде. Олимпиада ике этапта үтте. Беренсе этапта грамматика, орфография, фонетика, ижади һорауҙар өҫтөндә эшләнек. Икенсе этапта таныш булмаған кешеләр менән диалог формаһында һөйләшергә кәрәк ине.

***Һин ниндәй уңыштарға ирештең?***

-Ҡыҙғаныска ҡаршы, икенсе турға үтә алманым. Унда үтер өсөн 80 балл кәрәк ине, миңә ике балл етмәне. Шулай итеп, мин икенсе унлыкта булдым.

***Һиңә олимпиада оҡшанымы?***

-Эйе, оҡшаны. Сөнки мин бөтә республиканан килгән талантлы кешеләр менән таныштым, белемемде камиллаштырҙым. Өфө ҡалаһы менән дә танышып алдым.

# Колледждың “Аkkоштар”ы

Туймазы педагогия колледжының “Аkkоштар” бейеү ансамбле 2003 йылды



ойошторола. Етәкселәре Кашапова Розалия Хажи kыҙы менән Кашапов Рәшит Абҙал улы ансамлде юғары кимәлгә күтәрер өсөн күп көс түгәләр. Уларҙың тырышлығы менән “Аkkоштар” уҙған йылды колледждар араhында беренсе урынды яуланылар. Шулай уk төркөм районда һәм kалала уҙған бөтә концерттарҙа ла сығыш яhай. Төркөм 15 kыҙҙан тора. Йыл hайын яңы студенттар менән яңыра.

Беҙ был ансамблдең вәкиле, 32-се төркөм студенты, Шәмсетдинова Айгөлгә бер нисә һорау биреп үтергә булдыk:

*Был ансамблгә kасан индең һәм ни өсөн?*




-Мин был ансамблгә 2005 йылда индем. Сөнки кескәй сағымдан уk бейеү менән шөғөлләндем. Колледжға уkырға ингәс тә, яратkан эшемде ташламаҫkа булдым. Беҙҙең ауылда ла “Шатлыk” ансамбле эшләп килә, шунда мин үҙемдең беренсе аҙымдарҙы яhаным.

*Бейеү менән шөғөлләнеү һинең уkыуыңа kамасауламаймы?*

-Юk, hис тә kамасауламай! Минең уйлауымса, кеше яратkан шөғөлләнә бар күңелен бирhә, ул уға hәр сак ваkыт таба алаcаk.

*Һеҙҙең ансамбль ниндәй бейеүҙәр башkара?*

-Беҙҙең төркөм күбеhенсә халыk бейеүҙәрен башkара. Репертуарҙа башkорт, татар, мари, украин бейеүҙәре инә. Мин үҙем айырыуса башkорт һәм татар бейеүҙәрен башkарырға яратам.

*Тәүге тапkыр сәхнәгә kасан һәм нисә йәшендә аяk баҫтың?*

-Тәүге тапkыр мин 1-се синыфта уkығанда кесе төркөм менән сәхнәгә сыkтым, өсөнсө синыфтан башлап яңғыҙ бейеүҙәрҙе бейейем.



*Сығыштарыңдың kайһылары айырыуса иҫеңдә kалды?*

-Өсөнсө синыфта уkығанда беҙҙең “Шатлык” ансамбле Башkортостан Республикаhы Президенты алдында сығыш яhаны. Ә 2003 йылда беҙ Өфөлә Нәүрүз байрамында kатнаштыk. Ошолар минең хәтеремдә айырыуса hаkланды.

*16 апрель көндө Октябрьский kалаhында ССУЗ-дар араhында барған смотрҙа hеҙ бейеүҙәр конкурсында 1-се урын алғанhығыҙ икән, hеҙҙе шуның менән kотлайбыҙ. Был смотр тураhында бер нисә hүҙ әйтеп китhәң ине.*

-Рәхмәт, унда беҙ ике башkорт бейеүен алып барҙыk. Бер ай дауамында репетицияларға йөрөнөk. Һәм, күреүегеҙсә, тырышлығыбыҙ юkkа булманы. Смотрға бик күп бейеү төркөмдәре килгән ине, уларҙың ла бейеүҙәре бик яkшы булды, тик уңыш беҙгә йылмайҙы.

Әлбиттә, эш уңышта ғына түгел! Бында тырышлыk беренсе урында! Юkkа ғына беҙҙең ата- бабалар “Тырышkан табыр, ташkа kаҙаk kағыр”, тимәгән.



*Айгөл, минең һорауҙарға яуап биргән өсөн ҙур рәхмәт. Һеҙҙең ансамблгә киләсәктә ҙур уңыштар, ижади kаҙаныштар, беҙҙе тағы ла яңынан-яңы бейеүҙәр менән шатландырыуығыҙҙы теләйбеҙ. “Аkkоштар“ киләсәктә лә kала һәм республика кимәлендә лайыkлы урындар яулап, беҙҙең колледждың абруйын арттырып үҙ эшмәкәрлектәрен дауам итhендәр тигән теләктәрҙә kалабыҙ!*

*Әңгәмәне Абдуллина Д. (32-се төркөм) алып барҙы.*

Зәйнәб Биишеваның тыуыуына - 100 йыл



## Зәйнәб Биишеваның “Сәйер кеше” әҫәрендә сәйерлек проблемаһы

Кем ул сәйер кеше? Сәйерлек төшөнсәһе үҙ эсенә ниндәй мәғәнәләр һалған? Беҙҙең заманда сәйер кешеләр бармы? Был һорауҙар минә яҙыусыбыҙ Зәйнәб Биишеваның “Сәйер кеше” әҫәрен уҡығандан һуң килде. Зәйнәб апайҙың бөтә ижады кеше рухы үҫешен, был донъяла кешенең үҙ урынын нисек табыуын һүрәтләүгә, шуның менән бергә беҙгә, уның әҫәрҙәрен уҡыусыларға, фәһемле булырлыҡ, терәк-таяныс булырлыҡ, йәшәйештә маяҡ булырлыҡ әҫәрҙәр тыуҙырыуға йүнәлтелгән.

Уның әҫәрҙәрендәге геройҙарҙың һәр береһе үҙенсәлекле: һәр кешенең үҙ хыялы, үҙ маҡсаты, донъяға үҙ ҡарашы, үҙ принциптары. Һәр герой – үҙе бер айырым донъя. Ниндәй генә әҫәрен миҫалға килтерһәң дә, сәйерлелек проблемаһын урап үтмәгән автор. Һәр герой үҙ яйы менән донъя тулҡынында ҡайнай, был еңел булмаған фани донъяла батып ҡалмаҫҡа тырыша, донъялыҡта үҙ урынын табып йәшәргә ынтыла.

Донъя булғас, һәр кемдең дә тормошонда яҡшыһы ла, яманы ла етерлек, әммә төрлө кеше тормош һынауҙарын төрлөсә кисерә. Мәҫәлән, “Сәйер кеше” әҫәрендә генә беҙ Ғәзелдең, Нәфисәнең, Гөлбикәнең ҡайғы-хәсрәттәргә, ҡаршылыҡтарға бирешмәйенсә, нисек булһа ла тырышып, килеп сыҡҡан ҡыйынлыҡтарҙы хәл итергә, артабан да кешелек сифаттарын юғалтмайса, изге эштәр эшләп, намыҫлы хеҙмәт итеп донъя көтөүҙәрен күрәбеҙ. Уларҙың бер тормошо ике кеше тормошона торорлоҡ, сөнки быңдай рухи яҡтан ныҡ үҫешкән, намыҫлы заттар беҙҙең заманда һирәгерәк осрай. Ә бына ошондай кешеләрҙең ҡылығын, тормош маҡсаттарын аңламаусыларҙың береһе – Ғәлиәкбәр, ғүмере буйы Ғәзелде “сәйерһең һин”, “сәйер кеше ” тип йөрөтә. Ғәзелдең “елкәһендә” ултырып мәктәпте тамамлап, унан атаһы арҡаһында уҡырға инеп , диплом алып, юғары постарҙа эшләп, бөтә ил Ватан һуғышына күтәрелгәндә лә ситтә тороп ҡалып, аҙаҡ, “ялҡау өйрәк ” шикелле, бөтә эштәрен күңелен үҫтереүгә түгел, ә үҙенең рәхәтлек сығанаҡтарын күбәйтеүгә, нисек булһа ла еңелерәк юлдар менән йәшәргә тырыша ул. Уның күңеле түгел, ә кеҫәһе генә үҫә. Бар булмышы шуға бағышланған.

Йәки бына Гөлбикәнең ирен алып ҡарайыҡ. Ул бик уҡымышлы, аҡыллы кеше, донъяһы теүәл, әммә Мыжыҡов ғүмере буйы аҡса йыя – “Ябай ғына ашай, донъяһы ла нисә йылдар үҙгәрмәйенсә саң йыйып тора. Гөлбикә уның тышҡы ҡиәфәтенә, үҙен ғорур тотошона ғашиҡ була, бындай кешенең насар яҡтары булыуы мөмкин түгел тип уйлап, Мыжыҡовтың эске донъяһына бағырға ла тырышмай. Бергә тора башлағас ҡына “миҙал”дың икенсе яғы менән таныша һәм бик күп ауырлыҡтарға юлыға. Көрәшеп ҡарай, әммә һөҙөмтәләр булмағас, бындай тормошҡа риза булмай, кешелекһеҙлекте түҙергә тейеш түгеллеген, яҡты донъяла башҡа изге кешеләр, изге бурыстар барлығын иҫәпкә алып, ул ирен үҙенең ҡараңғы донъяһында ҡалдырып китә.

Әҫәрҙәге һәр ваҡиғаһынан фәһем алып , үҙебеҙгә һығымталар яһап барырға була. Улар күп, әммә күпме генә яҙһаң да шуныһы асыҡ: яҡшы, намыҫлы кешеләр сәйер тип аталырға тейеш түгел, сөнки был тәбиғи күренеш булырға тейеш. Ләкин насар ғәҙәтле кешеләр ҙә аҙ түгел. Уларҙың бар маҡсаты үҙҙәренә йүнәлә, донъяла тик уларға ғына рәхәт булһын, ә башҡалар – үҙ йүндәрен үҙҙәре күрһен тигән ҡарашталар. Бына бындайҙар, исмаһам, сәйер кешеләр тип атала алалар. Һорау тыуа: “Бындай кешеләр ҡайҙан барлыҡҡа килә һуң? ”Минеңсә, йәмғиәт үҙе бындай кешеләр барлыҡҡа килеүенә ғәйепле. Ә йәмғиәт ул кем? Ул – беҙ. Шулай булғас, “сәйер кешеләрҙе” бөтөрөү өсөн, бөтөрмәһәк тә аҙайтыу өсөн, һәр кеше үҙ йөрәгенә, аҡылына таянырға һәм яҡшы, яман яҡтарын барлап, үҙ өҫтөндә эшләргә тейеш. Үҙ-үҙебеҙҙе намыҫлы, кешелекле итеп тәрбиәләгәндә, беҙ киләсәк быуыныбыҙҙы ла мотлаҡ яҡшылыҡ юлына баҫтырасаҡбыҙ.

Тимәк, нимә әйтеп була? Сәйер кеше хәҙер бар микән? Әлбиттә, бар. Улар булған, бар һәм, моғайын, булырҙар ҙа, сөнки заман да, кешеләр ҙә, донъя ҡоролоштары ла үҙгәрә. Тик эшсән, намыҫлы, ғәҙел кешеләр сәйер, ә үҙенән башҡаларҙы яратмағандар ғәҙәти кеше тип һаналмаһын ине.

**Хөсәйенова Нәфисә**, IV курс студенты.
Әйткәндәй, Нәфисәбеҙ быйылғы Салауат йыйынында уҙғарыласаҡ “Сая ҡыҙҙар” бәйгеһендә ҡатнаша, уға уңыштар теләйек!



## Студенттар әсән...

- Белем – ҡунаҡ, аҡыл – хужа.
- Белем менән һуғармаһаң, аҡыл сәскә ата алмаҫ.
- Бала саҡтан алған белем – ташҡа яҙған һүҙ менән бер.
- Китап уҡымаған кеше – сәскә күрмәгән бал ҡорто.
- Ғәләм ҡояш менән яҡты, ә кеше белем менән.
- Ҡош ҡанат менән көслө, ә кеше – аҡыл менән.
- Аҡыл – иҫкермәҫ кейем.

## Ҡыҙҙар моңо

Тәбиғәт ул - моңло шишмә,
Бер йылмая, бер илай.
Күңел хистәре тулһа,
Шишмәләре сылтырай.

Бала кеүек яҙ көндәре:
Бысрана ла йыуына.
Май айҙары етеүенә
Гөлләмәгә тулына.

Йәмле йәйҙең аҙағында
Емешләнә баҡсаһы,
Көҙ айҙары етеүенә,
Бушап ҡала барыһы.

Алтын ялын ялбыратып,
Бар донъяны моңға һалып,
Ағаһына эйәреп,
Килеп етә ағарып
Ҡышҡы айҙар батшаһы.
Дүрт миҙгелдең үҙ башы.
Дүртеһе лә үҙенсә,
Моңло ҡоштар һайрашы.

*Ибраһимова Д.*

## *ЙОНДОҘНАМӘ*

***(5 – 11 май)***

**Ылаҡ (22.12 – 20.01)**

Аҙнанан артыҡ бер ни ҙә көтмәгеҙ. Был ваҡытта йондоҙҙар ҡаҙимгесә ял итә. Мөһим яңылыҡтарға ла өмөт итмәгеҙ. Буш, файҙаһыҙ һөйләшеүҙәр күп булыр. Шаршамбынан һуң ғына бер аҙ йәнләнеү һиҙелер.

**Һыуғояр (21.01 – 19.02)**

Барыһы ла яҡшы барған кеүек. Маҡсаттарығыҙ тормошҡа ашып тора. Бары уңыштарҙан башығыҙ әйләнеп китеүҙән һаҡланығыҙ. Матди хәлегеҙ мотлаҡ ыңғай яҡҡа үҙгәрәсәк.

**Балыҡ (20.02 – 20.03)**

Шишәмбелә ниндәйҙер мөһим осрашыу көтөлә. Һөйләшкәндә ул кешене күберәк маҡтағыҙ, был һис артыҡ булмаҫ. Аҙна аҙағында ҡатын-ҡыҙҙар өҫтәмә мәшәҡәт тыуҙырыр.

**Ҡуҙы (21.03 – 20.04)**

Эштәрегеҙҙә ҡайһы ваҡыт буталсыҡлыҡ күҙәтелер. Йыш ваҡланырһығыҙ, бер үк эшкә ҡат-ҡат тотонорһоғоҙ. Шаршамбынан һуң ғына дөйөм хәлегеҙ бер аҙ тыныс юҫыҡҡа ыңғайлар. Кесе йома бик файҙалы үтер.

**Буға (21.04 – 21.05)**

Аҙнаны һәйбәт үткәрерһегеҙ. Был бигерәк тә шишәмбе һәм шаршамбыла асыҡ күренер. Әгәр йомала ҡайҙалыр юлығыҙ төшһә, мотлаҡ уңырһығыҙ. Шул уҡ көндө өйөгөҙҙә ҡыуанысլы ваҡиға булыуы ихтимал.

**Игеҙәктәр (22.05 – 21.06)**

Әлнгә бөтәһе лә һәйбәт барған кеүек. Шулай ҙа ниндәйҙер етди эште кисектереп торорға мәжбүр булырһығыҙ, моғайын. Шаршамбыла туғандарығыҙ менән бәйле мәшәҡәттәр килеп сығыуы бар.

**Ҡысала (22.06 – 23.07)**

Аҙна башында кемделер алдарға мәжбүр булырһығыҙ. Бер нисә көндән үҙегеҙҙе лә алдарҙар, моғайын. Ғөмүмән, эштәрегеҙ яйлана һымаҡ, икеләнеүҙәр онотолор. Шәмбе бик һәйбәт үтер.

**Арыҫлан (24.07 – 23.08)**

Матди һәм аҡсаға ҡағылған мәсьәләләрҙе хәл итер өсөн уңайлы мәл. Күптәрҙе ыңғай яңылыҡтар көтә. Шулай ҙа сығымдарығыҙға иғтибарлыраҡ булығыҙ. Аҡсағыҙҙы дус-иштәрегеҙгә артыҡ күп тотонаһығыҙ кеүек.

**Ҡыҙ (24.08 – 23.09)**

Ошо арала һеҙгә яңы вазифа йәки икенсе эш тәҡдим итеүҙәре бар. Йондоҙҙар икеләнмәйенсә уға ризалашырға кәңәш итә. Кесе йома һеҙҙең өсөн ҡатмарлыраҡ килер, сама белеп кенә эш итегеҙ.

**Үлсәү (24.09 – 23.10)**

Ижади эшмәкәрлек өсөн уңайлы мәл. Тик ҡайһы ваҡыт хыялдарға артыҡ бирелеүегеҙ бар, был һеҙгә һис тә кәрәкмәй. Шаршамбы ауырыраҡ үтер, юҡ-бар һөйләшеүҙәрҙән арырһығыҙ ғына.

**Саян (24.10 – 22.11)**

Аҙна әллә ни ҡәнәғәтлек килтермәҫ кеүек. Юғалтыуҙар, көтөлмәгән аҡсалата сығымдар булыуы ихтимал. Шишәмбелә шикле кешеләр менән булып, ваҡытығыҙҙы юҡҡа уҙғарырһығыҙ.

**Уҡсы (21.04 – 21.05)**

Ғаиләлә бигүк тыныс булмаҫ кеүек. Ҡатын-ҡыҙҙар менән йәки уларға ҡағылышлы ҡытыршылыҡтар килеп сығыуы мөмкин. Кесе йоманан һуң барыһы ла урынына ултырыр. Шәмбелә күп һыу күреүҙе юрағыҙ.

***Гәзитте ойоштороусы*** – башҡорт теле уҡытыусыһы Кәримова Г.Я.
***Баш мөхәррир*** – Абдуллина Динара.
***Мөхәрририәт:***
Ахмәҙиева Зилара,
Хисамова Гүзәл,
Хәбибуллина Илнара,
Мәсәлимова Светлана,
Низамиева Регина,
Исмәғилева Ләйсән.
**Беҙҙең адрес:** Туймазы ҡалаһы Комаров урамы, 8б.
**Беҙҙең сайт:** http://www.tpkrb.ru/